**Муниципальное автономное общеобразовательное учреждение**
**«Средняя общеобразовательная школа № 2»**
**городского округа город Агидель Республики Башкортостан**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДАЮ |
|---|---|---|
| и принято на заседании ШМО | Зам. директора по УВР | Директор МАОУ СОШ №2 |
| протокол №_1_ | ________ Р.Х.Миннибаева | ________ Л. Н. Шашкина |
| от «_30_»___08___ 2019 г. | «_02_»___09___ 2019 г. | «_02_»___09___ 2019 г. |
| Руководитель ШМО | | Приказ № _139_ |
| ______ Р.К.Усаева | | |

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА ПО ПРЕДМЕТУ**
**«Родной (башкирский) язык**
начального общего образования

**Срок реализации: 4 года**
**На основе примерной программы: Министерства Образования Республики Башкортостан- 2017г**
**Разработчики: ШМО учителей гуманитарного цикла.**

**2019 год**

## 1. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре.

**Шәхсән һөҙөмтәләр:** (мәктәп уҡыусыларының башҡорт теленән төп программаны үҙләштереүе);

- донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү, үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу, башҡорт телен өйрәнеүҙең эшмәкәрлек һәм профессиональ эшмәкәрлектә кәрәкле булыуын аңлау;

- башҡорт телен ғәмәлдә ҡулланыуға әҙерлек: үҙ-ара аралашыуҙа толерантлыҡ;

- башҡорт теленең башҡорт мәҙәниәте менән танышыу сараһы булыуын аңлау.

**Метапредмет һөҙөмтәләр:** (рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәнеү):

- уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү, элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сарларын һайлау һәләтен үҫтереү.

-башланғыс классу уҡыусыларының танып белеү һәм эмоцианаль сфераларын үҫтереү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу.

- тыңланған һәм уҡылған тексты бирелгән эш төрҙәре (план, йөкмәткеһен һөйләү,) менән яңынан һөйләй белеү;

- уҡыу- методик комплекстың төрлө компоненттраы (дәреслек, аудиодиск интернет ресурстары, ваҡытлы матбуғат баҫмалары һ.б) менән эшләргә өйрәтеү

**Предмет һөҙөмтәләре:**

- Башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс белешмә; (курс йөкмәткеһе кимәлендә, өн, хәреф, һүҙ кеүек тел берәмектәрен табыу һәм сағыштыру һәләте.

- төп аңлатмаларҙы үҙләштереү: тел һәм телмәр, телдән һәм яҙма телмәр, диалог һәм монолог, телмәр ситуацияһы;

- башҡорт теленең телмәр берәмектәрен белеү, уларҙың билдәләре, һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, уларҙың үҙенсәлектәре;

- телмәр практикаһында ситуация һәм аралашыу стилендә тел берәмеген урынлы ҡулланыу;

- башҡорт әҙәби тел нормаларын һәм телмәр этикетын белеү, уларҙы әйтергә теләгән фекереңде төҙөгәндә, йәғни телдән һәм яҙма телмәр практикаһында ҡулланыу;

- ғәҙәти темпта тәҡдим ителгән мәғлүмәтте (уҡытыусы телмәре, радио һәм телевидение дикторы телмәре һ.б.) аңлау;

- текст менән мәғлүмәт сығанағы булараҡ эш итә белеү, тексҡа төрлө аспектта

анализ, тексты планға, тезисҡа, конспектҡа өйләндереүҙең төрлө информацион төрҙәрен үҙләштереү;

- ҙур булмаған текст фрагменттарын рус теленән башҡорт теленә тәржемә итеү.

## 2. Уҡыу предметының йөкмәткеһе

**1- се класс. Аҙнаға 0,5 сәғәт. Йылға- 16 сәғәт**

Дәреслек: Башҡорт теле: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1- се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы Ф.Ф.Мортазина, З.Ғ. Нафикова. – Өфө: Китап, 2017.

1- се класта һөйләү һәм яҙма телмәрҙең предмет йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға, шулай уҡ башланғыс класс уҡыусыларының йәш үҙенсәлектәренә тап килә һәм өс этаптан тора:

1 **Әлифбаға тиклемге осор.**

**1 Танышыу. Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр.-1.**

Өлгө буйынса эш дәфтәрендә нөктәләр ярҙамында бирелгән хәреф элементтарын тоташтырырға өйрәнеү. Картина буйынса һөйләү, таныш предметтарҙы табып әйтеү.

**2.Һөйләмдәрҙе шартлы билдәләр ярҙамында тамғалау-2.**

Һөйләм төҙөй, һөйләмде һүҙҙәргә айыра белеү

**3.Һорау һөйләмдәге интонация-1.**

Һөйләмдә һорауҙы, өндәүҙе, хәбәр итеүҙе күҙәтеү һәм билдәләү.

**4.Һүҙ моделе.Һүҙҙәге ижеккә бүлеү.-1.**

Һүҙ, ижек моделдәрен һыҙыу.

**5.Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Баҫым- 1**

Бирелгән предметтарҙы һүрәтләү. Уҡытыусы уҡыған һөйләмде аңлау. Ниндәй? Һорауы. Төҫтәрҙе сағыштырыу. Картина буйынса һөйләргә, һорау бирергә, һорауҙарға яуап бирергә, диалог төҙөргә өйрәнеү.

6. **Тартынҡы өндәр. Өн моделе-1**

Өн моделен һыҙыу. Өндәрҙе айыра белеү. Еләк- емеш исемдәрен үҙләштереү, уларҙың кеше организмына файҙалы яҡтарын билдәләү. Картина буйынса һөйләргә, һорау бирергә, һорауҙарға яуап бирергә, диалог төҙөргә өйрәнеү. Уҡытыусы уҡыған һөйләмде аңлау.

7. **Һуҙынҡы өндәр. Өн моделе.-2**

Эш дәфтәрендә өлгө буйынса нөктәләрҙе тоташтырыу. Рус телендәге өндәр менән сағыштырыу. Һүрәттәр буйынса һөйләү. Башҡортостандағы ҡоштар, уларға ярҙам итергә кәрәклеккә төшөнөү.

8. **Өндәү һөйләмдәр-1**

Һөйләмдең тамамланған уйҙы белдереүен аңлау һәм практикала ҡулланыу.Өндәү һөйләмгә миҫалдар килтереү, уларҙы эҫәрҙән табыу. Интонация буйынса һөйләм төрҙәрен айыра белеү.Йорт хайуандарын ҡарауҙа яуаплылыҡ тәрбиәләү.

9. **О, Ы, Э- өн- хәрефе ике телдә лә.-1**

Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү.Текст буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу.Артикуляцион күнекмәләрҙе нығытыу.Башҡорт телендәге һуҙын-ҡыларҙы рус телендәгеләр менән сағыштырыу һәм айырмаларын күрһәтеү

10. **Ә, Ө, Ү- өн- хәрефтәре- 1**

Артикуляцион күнегеүҙәрҙе ятлау. Ә,Ө,Ү өнөн дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен үҙләштереү. Тема буйынса әңгәмәлә ҡатнашырға өйрәнеү.

11.**Ҡ, Ғ, Һ- өн- хәрефтәре. -1**

Артикуляцион күнегеүҙәрҙе ятлау. Ҡ, Ғ, Һ өнөн дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен үҙләштереү. Тема буйынса әңгәмәлә ҡатнашырға өйрәнеү.

**12. Ҙ, ҫ,ң өн- хәрефтәре.-1**

Артикуляцион күнегеүҙәрҙе ятлау. Ҙ, ҫ,ң өнөн дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен үҙләштереү. Тема буйынса әңгәмәлә ҡатнашырға өйрәнеү.

**13. Башҡорт алфавиты-3**

Хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә әйтеү. Үҙең йәшәгән ҡала, ауыл, урам исемдәрен яҙыу, дөрөҫ яҙылышын иптәшеңә аңлатыу. Кластағы уҡыусыларҙың исемдәрен алфавит тәртибендә яҙыу.Тормошта алфавиттың ҡасан, ҡайҙа кәрәк булыуын асыҡлау. Йырҙар өйрәнеү

**2- се класс**
**2-се класс. Аҙнаға 1,5 сәғәт. Йылға- 53**

Дәреслек: Башҡорт теле: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 2- се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн дәреслек Ф.Ф.Мортазина, З.Ғ. Нафикова. – Өфө: Китап, 2019.

1. **Танышыу. Үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү.-мы, - ме киҫәксәләрен дөрөҫ ҡулланыу-1**

Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре, уларҙы дөрөҫ яҙыу, әйтеүҙе ҡабатлау. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре.Һөйләмдә һүҙҙәрҙең урыны.

2. **Минең мәктәбем. Һорау һөйләм. Кем? Нимә? һорауҙары. Тартынҡылар. Һуҙынҡылар. Баҫым. -7**

Башҡорт телендә һөйләмдең интонацион төрҙәрен һәм уларҙа тыныш билдәләре ҡуйылышын өйрәнеү. Һорау һөйләмдәрҙең төрҙәрен практик өйрәнеү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. Башҡорт телендә һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙедөрөҫ әйтеү.

3.**Мин һәм минең ғаиләм. Һүҙҙәргә ялғау өҫтәү. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре менән танышыу-19**

Исем. Исемдең һан, зат, килеш менән үҙгәреше. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Сифат. Сифат дәрәжәләре тураһында башланғыстөшөнсә. Ҡылым. Ҡылым һөйкәлештәре тураһында башланғыс төшөнсә. Ҡылымдың заман,зат, һан менән үҙгәреше.

**4. Мин һәм минең дуҫтарым. Ярҙамсы һүҙҙәр.-14**

Ярҙамсы һүҙҙәрҙең телмәрҙә ҡулланылышын практик үҙләштереү. Телмәр үҫтереү.

**5. Мине уратып алған донъя. Һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре-12**

Һөйләмдә һүҙҙәрҙең бер- береһе менән бәйле блыуын, бер бөтөн мәғәнә аңлатыуын практик үҙләштереү. Бирелгән темаларға һөйләшеү, әңгәмәләшеү.

3- сө класс

3-сө класс. Аҙнаға 1,5 сәғәт. Йылға- 53

Дәреслек: Башҡорт теле: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 3- сө класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы.Ф.Ф.Мортазина, З.Ғ. Нафикова. – Өфө: Китап, 2017.

**1.Танышыу-3**

Иҫәнләшеү. Танышыу диалогы. Һин ҡайҙан? Һиңә нисә йәш? Һинең туғандарың бармы? Телмәр төрҙәре.

**2. Минең мәктәбем-6**

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр. Текст. Һөйләм киҫәктәре. Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу.

**3.Минең республикам-5**

Бер мәғәнәле һүҙҙәр. Күп мәғәнәле һүҙҙәр. Башҡорт теленең һүҙлек составы. Башҡорт иле, уның халҡы,тарихы, ер-һыуы. Башҡортостандың данлы урындары.

**4.Мин һәм минең ғаиләм-13**

Омонимдар. Антонимдар. Синонимдар. Тамырҙаш һүҙҙәр. Ололарҙы ололау, тарихты белеү, өйрәнеү, ғаилә байрамдары, уларҙың әһәмиәте тураһында һөйләшеү, әңгәмәләр үткәреү.Киләсәктә илебеҙгә лайыҡлы алмаш, яҡшы белгес булып үҫеү теләге уятыу. Спорт менән шөғөлләнеү, һау- сәләмәт тормош итеү.

**5.Мин һәм минең дуҫтарым-18**

Исем. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдең һан, зат, килеш менән үҙгәреше. Ҡылым. Ҡылымдың заман, зат, һан менән үҙгәреше. Ата- әсәгә һөйөү тәрбиәһе.Дуҫтарға тоғролоҡ, ярҙамсыл, изге күңеллелек.

**6. Мине уратып алған донъя- 8**

Сифат. Сифат дәрәжәләре тураһында башланғыс төшөнсә. Алмаш. Зат алмаштары. Тәбиғәт менән кеше араһындағы тығыҙ бәйләнеш. Тыуған илгә һөйөү.

**4- се класс**

4-се класс. Аҙнаға 1,5 сәғәт. Йылға- 53

Дәреслек: Башҡорт теле: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 4- се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы.Ф.Ф.Мортазина, З.Ғ. Нафикова. – Өфө: Китап, 2017.

**. 1.Танышыу-3**

Иҫәнләшеү. Танышыу диалогы. Һин ҡайҙан? Һиңә нисә йәш? Һинең туғандарың бармы? Текст төрҙәре.

**2. Минең мәктәбем-10**

Өндәш һүҙ. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Йыйнаҡ һөйләм. Тарҡау һөйләм.Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.Аныҡлаусы. Тултырыусы Хәл. Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу.

**3.Минең республикам-19**

Һүҙбәйләнеш. Бер мәғәнәле һүҙҙәр. Күп мәғәнәле һүҙҙәр. Башҡорт теленең һүҙлек составы. Ялғауҙар. Тамыр һүҙҙәр. Яһаусы ялғауҙар. Үҙгәртеүсе ялғауҙар.Ҡушма һүҙҙәр.Алфавит. Яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдең һан, зат, килеш менән үҙгәреше. Башҡорт иле, уның халҡы,тарихы, ер-һыуы. Башҡортостандың данлы урындары.

**4.Мин һәм минең ғаиләм-10**

Үҙенсәлекле һүҙҙәрҙең яҙылышы. Сифат. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре. Тамыр, яһалма, ҡушма сифаттар. Һан. Ябай, ҡушма һандар.Һан төркөмсәләре.Алмаштар. Ололарҙы ололау, тарихты белеү, өйрәнеү, ғаилә байрамдары, уларҙың әһәмиәте тураһында һөйләшеү, әңгәмәләр үткәреү.Киләсәктә илебеҙгә лайыҡлы алмаш, яҡшы белгес булып үҫеү теләге уятыу. Тыуған илгә хеҙмәт итеү. Спорт менән шөғөлләнеү, һау-сәләмәт тормош итеү.

**5.Мин һәм минең дуҫтарым-6**

Ҡылым. Ҡылымдың заман, зат, һан менән үҙгәреше. Ҡылымдың барлыҡ, юҡлыҡ формалары. Ата- әсәгә һөйөү тәрбиәһе.Дуҫтарға тоғролоҡ, ярҙамсыл, изге күңеллелек.

**6. Мине уратып алған донъя- 5**

Ҡылымдың барлыҡ, юҡлыҡ формалары. Тәбиғәт менән кеше араһындағы тығыҙ бәйләнеш. Тыуған илгә һөйөү.

## 3.Тематик планлаштырыу.

### 1- се класс

| № | Бүлектәр исеме | Дәрес һаны |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу. Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр | 1 |
| 2 | Һөйләмдәрҙе шартлы билдәләр ярҙамында тамғалау | 1 |
| 3 | Һорау һөйләмдәге интонация- | 1 |
| 4 | Һүҙ моделе.Һүҙҙәге ижеккә бүлеү. | 1 |
| 5 | Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Баҫым | 1 |
| 6 | Тартынҡы өндәр. Өн моделе | 1 |
| 7 | Һуҙынҡы өндәр. Өн моделе. | 2 |
| 8 | Өндәү һөйләмдәр | 1 |
| 9 | О, Ы, Э- өн- хәрефе ике телдә лә. | 1 |
| 10 | Ә, Ө, Ү- өн- хәрефтәре- | 1 |
| 11 | Ҡ, Ғ, Һ- өн- хәрефтәре. | 1 |
| 12 | Ҙ, ҫ,ң өн- хәрефтәре. | 1 |
| 13 | Башҡорт алфавиты | 3 |
| | Барлығы | 16 |

### 2- се класс

| № | Бүлектәр исеме | Дәрес һаны |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу. Үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү.-мы, - ме киҫәксәләрен дөрөҫ ҡулланыу | 1 |
| 2 | Минең мәктәбем. Һорау һөйләм. Кем? Нимә? һорауҙары. Тартынҡылар. Һуҙынҡылар. Баҫым. | 7 |
| 3 | Мин һәм минең ғаиләм. Һүҙҙәргә ялғау өҫтәү. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре менән танышыу | 19 |
| 4 | Мин һәм минең дуҫтарым. Ярҙамсы һүҙҙәр. | 14 |
| 5 | Мине уратып алған донъя. Һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре | 12 |
| | **Барлығы** | **53** |

### 3- сө класс

| № | Бүлектәр исеме | Дәрес һаны |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу. Текст төрҙәре. | 3 |
| 2 | Минең мәктәбем. Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр. Текст. Һөйләм киҫәктәре. | 6 |
| 3 | Минең республикам.Бер мәғәнәле һүҙҙәр. Күп мәғәнәле һүҙҙәр. Башҡорт теленең һүҙлек составы. | 5 |
| 4 | Мин һәм минең ғаиләм. Омонимдар. Антонимдар. Синонимдар. Тамырҙаш һүҙҙәр. | 13 |
| 5 | Мин һәм минең дуҫтарым.Исем. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдең һан, зат, килеш менән үҙгәреше. Ҡылым. Ҡылымдың заман, зат, һан менән үҙгәреше | 18 |
| 6 | Мине уратып алған донъя. Сифат. Сифат дәрәжәләре тураһында башланғыс төшөнсә. Алмаш. Зат алмаштары. | 8 |
| | **Барлығы** | **53** |

**4- се класс**

| № | **Бүлектәр исеме** | **Дәрес һаны** |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу. Текст төрҙәре. | 3 |
| 2 | Минең мәктәбем.Өндәш һүҙ. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Йыйнаҡ һөйләм. Тарҡау һөйләм.Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.Аныҡлаусы. Тултырыусы Хәл. | 10 |
| 3 | Минең республикам. Һүҙбәйләнеш. Бер мәғәнәле һүҙҙәр. Күп мәғәнәле һүҙҙәр. Башҡорт теленең һүҙлек составы. Ялғауҙар. Тамыр һүҙҙәр. Яһаусы ялғауҙар. Үҙгәртеүсе ялғауҙар.Ҡушма һүҙҙәр.Алфавит. Яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдең һан, зат, килеш менән үҙгәреше. | 19 |
| 4 | Мин һәм минең ғаиләм. Үҙенсәлекле һүҙҙәрҙең яҙылышы. Сифат. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре. Тамыр, яһалма, ҡушма сифаттар. Һан. Ябай, ҡушма һандар.Һан төркөмсәләре.Алмаштар. | 10 |
| 5 | Мин һәм минең дуҫтарым. Ҡылым. Ҡылымдың заман, зат, һан менән үҙгәреше. Ҡылымдың барлыҡ, юҡлыҡ формалары. | 6 |
| 6 | Мине уратып алған донъя.Ҡылымдың барлыҡ, юҡлыҡ формалары. | 5 |
| | **Барлығы** | **53** |